*Илгинә МӨХӘМӘТОВА,*
*район халыҡ мәғарифы бүлеге методисы,*
*район башҡорттары ҡоролтайы*
*башҡарма комитеты сәркәтибе*



# Ил именлеге — халыҡ аҡылында

Дыуан районы — күп милләтле төбәк. Районда татыу ғаилә булып башҡорт, рус, татар һәм башҡа милләт халыҡтары йәшәй. Дыуан районы 50 ауылды берләштерә. Шуларҙың туғыҙы башҡорт ауылдары, бишәүһе башҡорттар төрлө милләт халыҡтары менән аралашып йәшәгән ауылдар. Тарихсыларыбыҙ билдәләүенсә, райондың төп халҡы — башҡорттар. Бынан күп быуаттар элек беҙҙең олатайҙар ошонда йәшәгән, тыуған төбәген дошмандарҙан ҡурсалаған. Улар асыҡ сырайлы, ярҙамсыл һәм ҡунаҡсыл булғандар. Ошо йомартлыҡ арҡаһында беҙҙең төбәккә бик күп күскенселәр, ҡасаҡтар килеп ултырған. Башҡорттар уларға ер биргән, һөҙөмтәлә Таҙтүбә, Мәтәле, Дыуан кеүек ҙур ауылдар хәҙер урыҫлашҡан, ә Ҡыҙылъяр тигән ауылды мордвалар һатып алған, бөгөнгө көндә ул Михайловка тип йөрөтөлә.

Башҡорт халҡы үҙенең меңәр йыллыҡ тарихында бер ваҡытта ла башҡа милләттәргә фажиғә килтермәгән, рухи байлығына ҡул һуҙмаған, сит халыҡты ҡырмаған. Һәр ваҡыт үҙ азатлығы, милли рух өсөн көрәшкән. Районыбыҙҙа барлығы 33726 кеше йәшәп, башҡорт халҡы 6137 кеше тәшкил итә.

Әммә беҙгә төшөнкөлөккә бирелергә түгел, ә үткәндәрҙән һабаҡ, фәһем алып, милләтебеҙҙе оло афәттән ҡотҡарып ҡалыу йүнәлешендә хәл иткес тәүәккәл аҙымдар яһарға кәрәк.

Халҡыбыҙҙың ауылдары, тарихы, ғөрөф-ғәҙәте, мәҙәниәте һаҡланыуының төп нигеҙе — әсә телен һаҡлауҙа, балаларҙа тыуған теленә һөйөү тәрбиәләүҙә һәм белем биреүҙә. Дыуан районы башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты эште тап ошонан башланы ла инде.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң районда ҡоролтай уҙғарылды һәм 15 кешенән торған башҡарма комитет булдырылды. Башҡарма комитет үҙе эргәһендә райондың вазифалы белгестәрен һәм әүҙем шәхестәрҙе йәлеп итеп, башҡорт телен үҫтереү, милли мәҙәниәтте һаҡлау, эскелеккә ҡаршы көрәш, мосолман динен тергеҙеү кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса комиссиялар булдырҙы.

Башҡарма комитеттың тәүге эш емештәренең береһе — район үҙәге Мәсәғүттә башҡорт балалар баҡсаһы асылыу. Беҙҙең район өсөн генә түгел, ә республиканың төньяҡ-көнсығышында урынлашҡан башҡа райондарҙың башҡорт балалары өсөн тәғәйенләнгән лицей-интернаттың Мәсәғүт ауылында асылыуы ла бик ҡыуаныслы хәл. Милләтебеҙҙе ҡотҡарып алып ҡаласаҡ һәм артабан үҫтерәсәк иң ҡөҙрәтле көс ул — белем. Киләсәктә милли кадрҙар булып етешерлек йәштәр үҙҙәренең тыуған телендә һөйләшергә, белем алырға, ғилемгә эйә булырға, төплө әҙерлекле алмаш булып үҫергә тейеш.

Мәсәғүт педагогия колледжы төньяҡ-көнсығыш төбәкте педагогик кадрҙар менән тәьмин итеүсе уҡыу йорто булып иҫәпләнә. Үткән уҡыу йылында колледжда башҡорт-инглиз теле бүлеге асылыуы буласаҡ уҡытыусыларҙы тағы ла тәрәнерәк белемле итеп әҙерләүҙә ыңғай мөмкинселектәр асты.

Башҡорт халҡының милли үҙаңын үҫтереү — ябай мәсьәлә түгел. Ул иң элек йәштәргә бәйле. Районда ике телде лә яҡшы белеүсе белгестәр һирәк. Ә башҡорт йәштәренең юғары белем алыуға ынтылышы күпкә түбән. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә юғары уҡыу йорттарының көндөҙгө бүле-

гендә районда 215-тән ашыу талип белем алһа, шуларҙың 85-е генә башҡорт-татар милләтенән. Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла милли кадрҙар булыуы — беҙҙең өсөн төп талап. Шунһыҙ милли зыялылар бер ваҡытта ла үҫмәйәсәк.

60—90-сы йылдарҙа туған телдә тәрбиә һәм белем ала алмаған рухһыҙ балалар үҫте, меңәрләгән кеше заман ҡорбаны булып манҡортҡа әүерелде. Район үҙәге Мәсәғүттә туған телендә бер һүҙ ҙә белмәгән башҡорт балалары әле лә бар. Башҡорттоң йыр-моңо, ҡурайы уларҙы ҡыҙыҡһындырмай, күптәре ҡулдарында башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарҙы тотоп та ҡараған юҡ. Улар бар булмышы менән урыҫ мөхитендә йәшәй. Урыҫлашып бөткән башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары тормош иптәшен дә шул милләт халыҡтары араһынан эҙләй. Был ҡатнаш никахтар бөтөнләй булмаһын тигән һүҙ түгел, ләкин һәр кем үҙ милләтенең вәкиле булараҡ, уның киләсәк яҙмышы өсөн бурыслы. Һәр ата-әсә үҙ балаһына халҡының телен, ғөрөф-ғәҙәтен, тарихын еткерергә тейеш.

Бөгөнгө көндә йәштәрҙе борсоған мәсьәләләр бик күп. Ләкин улар алдында торған иң ҙур маҡсат, иң изге бурыс — уҡыу, белемгә эйә булыу.

Райондың ҡоролтай башҡарма комитеты ошоларҙы ата-әсәләргә, бигерәк тә йәштәргә аңлатыу маҡсатында өгөт-нәсихәт эше алып барыуҙы үҙенең төп бурыстарының береһе тип ҡарай.

Милли үҙаңды тәрбиәләүҙә мәғлүмәт сараларының, айырыуса матбуғаттың, әһәмиәте ҙур. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең районда башҡорт телендә гәзит сығарылмай.

Хәҙерге йәштәр милли матбуғатты, башҡорт әҙәбиәтен уҡымай тиерлек. Сәбәбе билдәле — күптәр үҙ телендә уҡый белмәй. Шунлыҡтан улар «Башҡортостан», «Ватандаш», «Йәшлек», «Ағиҙел», «Шоңҡар» һ.б. баҫмаларҙың барлығын да белмәйҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең районда милли матбуғатҡа яҙылыу бик һүлпән бара.

Беҙҙең ҡоролтай башҡарма комитеты тағы бер мәсьәләне ыңғай хәл итеү эшен башланы: районыбыҙҙың арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙарының данын халыҡҡа кире ҡайтарыу, уларҙың исемдәрен мәңгеләштереү кеүек эштәрҙе үҙ өҫтөнә алды. Мәҫәлән, шағир Тимер Йосопов — беҙҙең яҡташыбыҙ. Ләкин ул тыуып үҫкән Әпсәләм ауылы бөтөрөлгән. Район хәкимиәте менән берлектә беҙ Әпсәләм ауылын тергеҙеү эшен Тимер Йосопов тыуған өйҙөң нигеҙ ташын яңыртыуҙан башлап ебәрҙек һәм шағирыбыҙҙың 60 йәшлек юбилейына райондаштары уға өр-яңы йорт бүләк итте. Шулай уҡ Иҫке Хәлил ауылынан Низам Ҡәрипте лә онотмайбыҙ. Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 55 йыллығы уңайы менән һәм яҙыусының 95 йәшлек юбилейы айҡанлы «Иҫкә алыу көнө» үткәреп, тыуған өйөнә таҡтаташ ҡуйыу сараһын планлаштырҙыҡ.

Шағирҙар, яҙыусылар, журналистар менән осрашыуҙарҙы йышыраҡ үткәрергә тырышабыҙ, улар менән танышыу йәштәр күңеленән эҙһеҙ юғалмай. Сөнки таныш яҙыусы йәки шағирҙың әҫәрҙәрен уҡырға ынтылыш, теләк уяна уларҙа.

Туған тел байлығын йәш быуынға мәктәптәрҙә тел уҡытыу менән генә еткереп булмай. Уға сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ байлығын да өҫтәһәк, туған телебеҙҙең матурлығы тағы сағыуыраҡ асыласаҡ.

Районыбыҙҙа сәнғәт байлығын халыҡҡа еткереүҙә үҙ төбәгенең патриоты, башҡарма комитет ағзаһы, оҫта бейеүсе, юғары квалификациялы хореограф Әнүәр Хәким улы Шафиҡов ойошторған «Дуҫлыҡ» бейеү ансамбленең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Дыуан районында йәшәгән, Мәсәғүт педагогия колледжы талиптары һәм республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусылары араһынан бейеүгә һәләтле йәштәрҙе йыйып алып, Әнүәр Хәким улы легендаларға бай башҡорт халыҡ бейеүҙәрен, шулай уҡ төрлө милләт бейеүҙәрен, төрлө композицияларҙы сәхнәләштереүҙә үҙ көсөн, ваҡытын йәлләмәй. «Дуҫлыҡ» ансамблен һәр ерҙә көтөп алалар. Ә.Шафиҡов ҡуйған бейеүҙәр ансамблдә бейегән йәштәрҙә генә түгел, урындағы халыҡта милли рух, үҙаң тәрбиәләүгә шаҡтай өлөш индерә.

Халҡыбыҙҙың рухи-мәҙәни тормошонда диндең дә роле баһалап бөткөһөҙ. Эскелек, әхлаҡһыҙлыҡ, наркомания кеүек яман күренештәрҙе сикләүҙә дин йоғонтоһо ҙур көскә эйә. Хәҙерге буталсыҡ замандарҙа киләсәк көнгә ышанысы ҡалмаған, тормоштоң яҡшырыуына өмөтөн өҙгән кешеләрҙә киләсәккә өмөт уята, ышанысын нығыта. Иң ауыр замандарҙа ла кешеләр донъяның һәйбәтләнәсәгенә, тормоштоң еңеләйәсәгенә өмөт тотоп йәшәгән, дуҫлыҡ, бер-береңә ярҙам итеү, күршелек, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре ифрат ныҡ яҡынайтҡан. Әле беҙҙең район үҙәгендә халыҡты берләштерер, психологик яҡтан ярҙам итерҙәй, өмөт усағы булырҙай мәсет

юҡ. Ә тормош көндән-көн беҙ аңлай алмаҫлыҡ йүнәлештә үҙгәрә. Кемдәрҙер сиктән тыш байый, кемдер хәйерсе хәлендә...

Тормош нисек кенә ауыр булмаһын, боронғо дәүерҙән ата-бабаларыбыҙ, ил инәләре яҡшы төшөнгән һәм атҡарған оло бер вазифаны беҙ ҙә онотмаҫҡа һәм үтәргә тейешбеҙ: милләт сәңгелдәге янында ҡатын-ҡыҙ тора. Элек-электән ауырлыҡты ир-егеттә р үҙ иңенә күтәргән, әммә тағы ла ауырыраҡ була башлаһа, ҡатын-ҡыҙ көслө затҡа ярҙамға килгән.

Ысынлап та, ҡатын-ҡыҙ — тиңһеҙ ҡеүәт ул. Шуға ла ил яҙмышын, милләт киләсәген хәл иткәндә был көскә мөрәжәғәт итмәү мөмкин түгел. Ошоларҙы иҫәпкә алып, район ҡоролтайы башҡарма комитеты башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡорон йыйҙы һәм үҙе эргәһендә ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһын булдырҙы. Был ойошма халҡыбыҙҙың изге йолаларына нигеҙләнеп, милләтебеҙҙе бер нисә тиҫтә йылдар буйына һуҙылған йоҡоһонан уятыу, милли ғорурлыҡты тергеҙеү, аң-белем кимәлен үҫтереү, туған телдең абруйын күтәреү, әхлаҡи, рухи ҡаҙаныштарыбыҙҙы тергеҙеү, ғаилә ныҡлығын ҡотҡарып ҡалыу кеүек ҙур мәсьәләләрҙе тикшереү һәм эшлекле хәл итеү юлдарын билдәләү кеүек бурыстарҙы үҙ өҫтөнә ала. Башҡа бик күп проблемаларҙы хәл иткәндә лә ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы башҡарма комитеттың ҙур ярҙамсыһы булыр тигән ышаныстабыҙ.

Төрлө тәрбиәүи сараларға, өгөт-нәсихәткә таянып, халыҡты, бигерәк тә йәштәрҙе, айыҡ тормошта, әҙәпле йәшәргә саҡырабыҙ. Ил именлеге һәр беребеҙҙең фиҙакәр хеҙмәтенә, халҡыбыҙҙың айыҡ аҡылына бәйле.